*Зөһрә АЛТЫНБАЕВА*

# СИЛӘБЕ ҺАНДУҒАСЫ

*Йырлы күңел — нурлы күңел, тиҙәр халыкта. Йыр аша йөрәктә ташып барған сикһеҙ шатлыкты ла, үҙәкте өйкәгән ауыр кайғыны ла таратырға мөмкин. Кеше йырҙы канат итеп күккә күтәрелә, елкән итеп диңгеҙҙә йөҙә. Күңел түрендә йыр йөрөтмәгән кеше юктыр. Ә бына йырсы һөнәрен һайлаусы үҙенең генә түгел, йөҙләгән, меңләгән кешенең йөрәк кылдарын тибрәтә. Йырсы менән бергә моңланабыҙ, кыуанабыҙ, һокланабыҙ.*

*Ғафуан Фазуллинды «Силәбе һандуғасы» тип йөрөтәләр. Халык йырҙарын да, лирик көйҙәрҙе лә үҙенә генә хас моң, оҫталык менән башкара ул. «Илсе Ғайса», «Зөлхизә», «Һандуғас», «Ҡоток» һ.б халык йырҙарын айырыуса яратып йырлай Ғафуан. Композиторҙар әҫәрҙәрен дә үҙ итә ул. Сара Садикова, Айрат Ҡобағошов, Нур Дауытов, Ғәзиз Дәүләтбирҙин йырҙарын да Силәбе тамашасыларына еткәреп тора ул. Был төбәктең һәүәҫкәр композиторҙары Илдар Сәлимов, Рафаил Бакировтар ҙа өр-яңы йырҙарын иң элек Ғафуанға ышанып тапшыра. Сөнки ул тәүләп сәхнәгә алып сыккан йыр һәр сак сәхнә түрендә, оҙон ғүмерле була.*

Ғафуан үҙе Башҡортостандан, Нуриман районының Иҫке Әсәй ауылында күп балалы ғаиләлә тыуып үҫкән. Атаһы Мырҙағәли ҙә, әсәһе Мәҙинә лә йыр-моңға ғашиҡ кешеләр. «Ағас тамырҙан үҫә, һәләт нәҫелдән күсә» тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр. Фазуллиндар нәҫелендә йырламаған кеше юҡ, ахырыһы. Ә бына профессиональ йырсы һөнәрен Ғафуан ғына һайлаған. Сөнки үҙен белә-белгәндән бирле йыр менән дуҫ.

— Мәктәптә уҡығанда дәрестәремде лә йырлай-йырлай әҙерләй торғайным, — тип хәтерләй йырсы. — Атайым: «Йырлап дәрес әҙерләйҙәрме ни? Бар, мунсаға барып йырла», — тип көлә ине. Мәктәпте тамамлағанда киләсәктә йырсы, артист булырға ҡарар иткәйнем инде. Әммә тормошта һәр нәмә лә һин уйлағанса ғына килеп сыҡмай. Төрлө сәбәптәре булып, имтиханға һуңланым. Шуға күрә техник училищеға уҡырға керҙем. Артабан армияла хеҙмәт итеп ҡайттым. Әле училищела уҡығанда уҡ бер нисә йыл рәттән Моторҙар эшләүселәр мәҙәниәт һарайындағы хорға йөрөнөм. Ошо хорҙа йырлағанда йыш ҡына танылыу яулап өлгөргән артистар менән бергә концерттарҙа сығыш яһаным. Артабан артист булыу теләге тағы көсәйҙе. Сәнғәт институтына уҡырға инер өсөн башланғыс музыка белеме талап ителәсәген белгәс, тәүҙә Өфө сәнғәт училищеһына уҡырға индем. Дүрт йыллыҡ программаны ике йылда үҙләштереп, артабан Өфө сәнғәт институты студенты булып киттем. Йыр һәм моң донъяһы серҙәрен төшөнөүҙә институт уҡытыусылары ҙур ярҙам күрһәтте. Илһамлы оло сәхнәгә тәүге аҙымымды иһә Силәбе филармонияһы йырсыһы булараҡ яһаным.

Ғафуандың институтты тамамлағандан һуң Өфөлә ҡалмай Силәбе тарафтарына юл алыуы әлеге шул яҙмыш елдәренә буйһоналыр, моғайын. Тәүҙә йәшлек алабарманлығы менән ашығып яңылышманыммы, тигән уйҙар уралһа ла үкенмәй ул. Үҙ йырҙарын, үҙ тамашасыһын тапты Ғафуан.

Әле бына йырсы һуҡмағы оло юлға алып сығыуға тиҫтә йыл үтеүгә уның абруйы ла, дәрәжәһе лә бар, һәр ерҙә көтөп алған тыңлаусылары ла етерлек. 1995 йылда уға Бөтә донья башҡорттары ҡоролтайы делегаттары алдында сығыш яһау бәхете тейҙе. Ул ғына ла түгел, Ғафуан Фазуллинға «Башҡортостандың атҡаҙанған артисы» тигән маҡтаулы исем бирелде. Тимәк, Силәбе өлкәһе халҡы ғына түгел, Башҡортостандың йыр һөйөүселәре лә таныған уның талантын.

Байтаҡ конкурстарҙа, фестивалдәрҙә ҡатнашып, лауреат исеменә лайыҡ булды йырсы. 1990 йылда, Силәбе филармонияһында эшләй башлаған ғына мәлендә, ул Смоленск ҡалаһында уҙғарылған «Рәсәй тауыштары» тигән телевидение һәм радио конкурсында ҡатнашты һәм халыҡ йырҙарын башҡарыу оҫталығы буйынса 2-се дәрәжәле диплом яуланы. Әлбиттә, Рәсәйҙең бик күп төбәктәренән танылған йырсылар, ансамблдәр ҡатнашҡан был абруйлы конкурста ҡатнашыу оло сәхнәгә аяҡ баҫҡан йәш йырсының артабанғы ижадына этәргес көс була. Артабан бындай бәйгеләр байтаҡ булды Ғафуандың йырсы ижадында, шулай уҡ ошо тәүге конкурста яулаған лауреат исеме үтә ҡәҙерле уға.

Сәхнә уңғандарҙы, тәүәккәлдәрҙе үҙ итә. Ғафуан быны яҡшы аңлай, шуға ла профессионал кимәлен, йырсы оҫталығын күтәреү өҫтөндә ныҡышмалы эшләй. Һәр яңы сығышы элеккеләренән айырыла, торған һайын сағыуыраҡ, зауыҡлыраҡ була бара. Йырҙары менән тамашасыларҙың күңелен табып йәшәгән йырсы ғына сәхнә түрендә оҙон ғүмерле булғанын аңлай Ғафуан. Тырыш хеҙмәт емеш бирә — уны яраталар, сығыштарын көтөп алалар, шундай һәләтле йырсылары булыуға ғорурланалар. «Силәбе һандуғасы» тигән маҡтаулы исемде лә юҡҡа ғына ҡушмағандарҙыр. Силәбе өлкәһендә йәшәгән 111 милләт халҡы араһында танылыу яулау — үҙе бер батырлыҡ. Һуңғы осорҙа заман ауырлыҡтарына һылтанып, күптәр тамашаларға һирәк йөрөй. Шуға күрә халыҡты концерттарға йәлеп итеү күп тырышлыҡ, оҫталыҡ талап итә. Ғафуан Фазуллин быны яҡшы аңлай һәм үҙ тамашасыһы булыуға ғорурлана, уларҙың рухи аҙыҡҡа һыуһынын ҡандырыу өсөн бөтә көсөн һала. Яҙҙарын ғына түгел, көҙҙәрен, ҡыштарын да һайрай Силәбе һандуғасы. Һайра, һайра, һандуғас!